1. Мәҡәлдең дауамын яҙығыҙ: <u>*Белдең бер һүҙ...*</u>

2. Телмәр эшмәкәрлегенең дүрт төрөн һанап китегеҙ? **уҡыу, яҙыу,тыңлау, һөйләү**

3. Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй ҡатламға инә?

*Ғилемлелек* <u>***– даръялыр,***</u>

*Ҙур* <u>***рыялыҡ***</u> *булмаһа;*

*Аҡыллы әҙәм –* <u>***олуғтыр,***</u>

*Асыуы артыҡ булмаһа. (Аҡмулла)* **Иҫкергән һүҙҙәр.**

*4. Йөрәгем –* <u>***ҡәберлек минең:***</u>

*Унда үткәндәр илай.*

*Йөрәгем –* <u>***сәңгелдәк минең:***</u>

*Унда киләсәк даулай. (Р.Ғарипов)* Билдәләнгән һүҙҙәр шиғырҙа нимә булып килә? **Һөйләмдең ҡылымы.**

*5. Йырлай алмам һинең йәмдәреңде,*

*Йәшәй алмам йырһыҙ, могайын.*

*Сагылыңда үҫкән сихри моңло*

*Бер ҡурайың гына булайым.* (Р.Сафин) Ҡылымдарҙы табып, затын билдәләгеҙ. **Йырлай- 1-се зат. Йәшәй- 3-сө зат. Үҫкән – 3-сө зат, булайым – 1-се зат.**

6. Һөйләмдәге эйәреүсе киҫәктәр менән эйәртеүсе киҫәктәрҙең, шулай уҡ эйәрсән һөйләм менән баш һөйләмдең бәйләнешен белдереүсе ярҙамлыҡ һүҙҙәр нисек атала?

7. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ, аңлатығыҙ: *гилем – ҡош, аҡыл - ҡанат.* **Һөйләмдең эйәһе, хәбәре лә исем һүҙ төркөмөнән.**

*8. Болон сәскәләрен һыйпап үтәм,*

*Ҡапыл күрәм:алда балтырган.*

*Шул үләндең исемен әллә нимә*

*Йөрәгемә уйып ҡалдырган. (Р.Бикбаев)* алмаштарҙы табып төрөн билдәләгеҙ. **Шул – күрһәтеү алмашы, үллү нимә – билдәһеҙлек алмашы.**

9. Шиғырҙа ни өсөн йәйәләр ҡулланылған, дөрөҫ яуап яҙырға.

*Ҡарайым, ситән артында*

*Ҡыҙ мине шәйләп тора.*

*(Бындагы гәҙәт буйынса,*

*Көнбагыш сәйнәп тора)* (М. Кәрим). **Аңлатма бирелгән.**

10. <u>***Көнөн***</u> *яуа,* <u>***төнөн***</u> *яуа,*

*Аҙна яуа бер тоташтан,*

*Әйтерһең, күк ҡолаган да,*

***Һауа*** *менән* ***ер*** *тоташҡан* (М. Кәрим).

Аҫтына һыҙылған һүҙҙәр нисек атала? **Рәүеш**

11. *Муйыллыҡ. Эргәлә генә күҙ йәшеләй таҙа һыулы йылға. Бейек кенә ҡая. Һөҙәк яр.* Бирелгән һөйләмдәр составы буйынса ниндәй? **Эйә һөйләмдәр.**

12. – Йә инде, Хөсәйен ағай өйҙә юҡ саҡта, **һыйыныр** мөйөш тапмай, бер яҡты ҡарашҡа, йылы һүҙгә зар-интизар булып, бәләкәй генә башын ҡайҙа тығырға белмәй йөрөгән ошо малайҙы йәлләп, эсем боша, йөрәгем **яна торғайны**, – ти был (Әнүр Вахитов). Һөйләмдәге аҫтына һыҙылған һүҙҙәр ниндәй һүҙ төркөмөнән килгән? **Ҡылымдан**

13. Өмөтләнәм зәңгәр һауаларҙан,
Өмөтләнәм зәңгәр күктәрҙән,
Өмөтләнәм бөгөн аҙҙан ғына,
Өмөтләнәм һәр саҡ тын кистәрҙән,
Өмөтләнәм яҡты таңдарҙан,
Өмөтләнәм ғорур имәндәрҙән,
Өмөтләнәм нескә талдарҙан (И.Кинйәбулатов). сифаттарҙы табығыҙ, мәғәнәләрен аңлатығыҙ.**Зәңгәр – төҫ, яҡты, ғорур, нескә- буй-һынды аңлата**

14. Йомаҡтарҙың яуаптарын яҙығыҙ:

А)Өфөнөң уртаһында нимә тора?. **Ф хәрефе**

Б) Дәрес аҙағы ни менән бөтә? **С хәрефе менән**

В) Йылғала өс өйрәк менән дүрт ҡаҙ йөҙөп йөрөй ине. Уларға биш тауыҡ һәм ике әтәс ҡушылды. Йылғала бөтәһе нисә ҡош йөҙә? **7 ҡош.**

15. ***Унлап, һигеҙләп*** һандарының төрөн билдәләгеҙ? **Сама һандары.**

16. Биш ***баш*** умарта, ете ***дана*** китап. Билдәләнгән һүҙҙәр нисек атала? **Нумератив һүҙҙәр**

17. ***Яңыса, һинеңсә, айыуҙай, йәйен*** һүҙҙәре ниндәй һүҙ төркөмгә ҡарай? **Рәүеш**

18. ***"Ҡурайҡайым еңел, көйө ауыр"*** тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ? **Көйөндә – аһ-зар яҙылған.**

19. *Төҙөлөшө һәм мәғәнәһе ягынан ойошҡан, ныгынган, телмәрҙә әҙер килеш ҡулланыла торган хис-тойго биҙәкле, образлы һүҙбәйләнештәр. Улар кәмендә ике һүҙҙән тора, бер төшөнсәне белдерә* **нимә тип атала? Фразеологик берәмектәр**

20. *Айыу майы һөртөү* – мәғәнәһен аңлатығыҙ. **Алдау**